

# АРҒУЖА

*Башкорт телендә махсус бит №10 (100)*
***Октябрь, 2018 йыл***

Якташыбыҙ

## *Хафиз ҠУШАЕВ*
## (1888—1937)

***Хафиз Ҡушай улы Ҡушаев — халкыбыҙҙың арҙаклы улы, билдәле дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре.***



Арғаяш районының Көҙәш ауылында тыуып үҫкән. Ҡазанда Ғәлиев мәҙрәсәһендә укыған. 1909—1917 йылдарҙа батша армияһында хеҙмәт иткән, 1919—1921 — Арғаяш кантоны рәйесе, 1922—1929 — Башкортостандың Үҙәк Башкарма комитеты рәйесе, 1929—1937 йылдарҙа СССР-ҙың ЦИК аппаратында эшләгән.

1937 йылда сәйәси репрессия корбаны, 1957 йылда аклана.

17 ноябрҙә Көҙәш урта мәктәбендә Хафиз Ҡушаевтың тыуыуына 130 йыл тулыуға арналған сара ойошторола. Арҙаклы якташты иҫкә алыу, уның тормош юлы һәм эшмәкәрлеге тураһында сығыштар каралған. Унда Силәбе өлкәһенең дәүләт һәм йәмғиәт эшмәкәрҙәре, Башкортостандан ғалимдар һәм журналистар катнашасак.

## *Ҡушаевтың әсәһе тураһында*

***Сайма Фазылова Көҙәш ауылында йәшәй, 1939 йылғы, педагогик хеҙмәт ветераны. Арғаяш районының әҙәби берекмә ағзаһы. Ул арҙаклы Ҡушаевтар нәҫелен дауам итеүсе.***

Сайма Ғәзиз кыҙы “Өләсәй” исемле повесть ижад итә. 2013 йылда әҫәр төбәк-ара ижади конференцияла тикшерелеп, ыңғай баһа ала. 2015 йылда айырым китап итеп Силәбелә үҙнәшер юлы менән баҫыла.

Был китаптың инеш һүҙендә Сайма Ғәзиз кыҙы: “Якташтарым хакындағы әҫәремде “Бибисара” тип атаным. Уның төп геройы — тормош һабағы булырҙай катын-кыҙ. Был — тарихи шәхес, 1922—1929 йылдарҙа БашЦИК рәйесе, унан 1937 йылғаса Мәскәүҙә ЦИК Президиумында эшләгән Хафиз Ҡушаевтың әсәһе тураһында биографик повесть. Әҫәрҙә һүҙ шундай шәхесте тәрбиәләгән әсә хакында бара, уның еңел булмаған яҙмышын, кешелек сифаттарын һәм тормош фәлсәфәһен асып бирергә ынтылдым”, — тип яҙа.

### *АРҒУЖА*

*Күк Уралдың күкрәгендә*
*Урғып тыуҙы Арғужа,*
*Зәңгәр күлдәр илкәйенә*
*Арғужа үҙе хужа.*
*Арғужакай кайынына*
*Аткайымды бәйләйем,*
*Китәһем дә килмәй һинән,*
*Шунда ине йәйләйһе.*

### *БЕҘ ҮҘЕБЕҘ — БАШҠОРТТАР!*

*“Беҙ үҙебеҙ — башкорттар!” —*
*Тиеп яҙған Бабичтәр,*
*Ниҙәр генә яҙыр икән*
*Беҙҙән калған башкорттар?*
*Башкорт булһаң, Бабич кеүек,*
*Милләтеңде өҙөлөп һөй!*
*Мәғәнәле тәрән фекер*
*Йөрәгеңә яҙып куй!*

Сайма ФАЗЫЛОВА.

Конкурс

## *Өләсәйҙәр һәм олатайҙар ярышты*

***1 октябрҙә Арғаяш мәҙәниәт йортонда ололар көнөнә арналған ретро-концерт һәм ғаиләләр конкурсы булып уҙҙы.***

Атанан күргән ук юнған, әсәнән күргән тун бескән, ти халык мәкәле. Ил терәге булған ғаиләләр менән танышыу ине ярыштың бер максаты. Унда өс ғаилә: Илдар менән Әлфиә Хәйретдиновтар, Милә менән Ризабәк Һакаевтар, Рәүеф менән Зәкиә Рәхмәтуллиндар бәйге корҙо.

“Таныш булайык!” — ярыштың тәүге “Визит карточкаһы” тигән турын Хәйретдиновтар башлап ебәрә. Бакһаң, был татыу ғаилә 37 йыл бергә ғүмер итә икән. Илдар халык театрында рәссам-куйыусы, Әлфиә — педагог-психолог, балалар баксаһында эшләй. Улдары музыкант, хәрби оркестрҙа уйнай, музыкаль мәктәптә укыта. Ике ейәнсәрҙәре бар. Сәскәләр үҫтерәләр, баксасылык менән шөғөлләнәләр. Улар бер тауыштан: “Иңгә-иң терәп йәшәү бәхет түгелме ни?!” тиҙәр.



*Рәүеф һәм Зәкиә Рәхмәтуллиндар — еңеүселәр.*

Рәүеф менән Зәкиә 41 йыл йәшәйҙәр. Улар йәшлек хәтирәләре менән уртаклашып тормош юлдары тураһында һөйләне. Әле Арғаяшта торалар. Эльмира һәм Гүзәл исемле акыллы кыҙҙар тәрбиәләгәндәр, ике ейәндәре һәм ейәнсәрҙәре бар. Ҡош-корт тоталар, йәшелсә үҫтерәләр. Бәшмәккә йөрөйҙәр, йылы якка барып ял итәләр. Быйыл бик күп итеп емеш-еләк йыйғандар. Рәүеф алтын куллы хужа, Зәкиә йыр-моң яратканға күрә “Гүзәлем” фольклор ансамбленә йөрөй.

Милә менән Ризабәк бергә 45 йыл. Был бик уңған һәм өлгө булырлык музыкаль ғаилә. Улар бала-сағаларын да шул рухта тәрбиәләгәндәр. Быйыл, иһә, Милә Васильевнаның хеҙмәт юлына илле йыл тулды. Ул машинаны бик оҫта йөрөтә. “Тауыш” музыкаль телетапшырыуҙы яратып карайҙар, окшаған йырсыға тауыш бирәләр. “Беҙҙең өйҙә музыка тантана итә”, — тип хаклы ғорурланалар.

“Өләсәй коймағы” тигән тур аш-һыу оҫталығын һынауға корола. Тәмле бәлеш, шәңкә, емеш-еләк пироггарынан өҫтәл һығылып торҙо. “Ижади бәйге” артист булып кыланыуҙы талап иткәнгә күрә олатайҙар һәм өләсәйҙәр сәхнәлә майҙан тоталар. Финал туры — “Экспромт” — бәйгеселәрҙең интеллектуаль кимәлен асыкланы.

Барыһы өсөн дә ике сәғәт һуҙымында ярыш аралаш элекке йырҙар менән үреп алып барылған тамаша таңһык кына булғандыр, моғайын. Жюри залдағы алкыштарға карап ярышка йомғак яһай. Рәүеф һәм Зәкиә Рәхмәтуллиндар еңеүселәр тип табыла. Быйыл улар алтмыш йәштәрен билдәләгәндәр.

Ойоштороусылар: “Беҙҙең өлгөлө олатайҙар һәм өләсәйҙәр, һеҙгә коростай һаулык, оҙон ғүмер һәм бәхетле картлык теләйбеҙ!” — тип хушлаштылар.

Л. НАЗАРОВА.

юбиляр

## *Башкорт сәсәниәһе*

***Ҡуйһары ауылында йәшәүсе Венера Шәймөхәмәтова ошо көндәрҙә үҙенең 70 йәшен билдәләй.***

Укытыусы, йырсы һәм башкорт халык ижадын үҫтереүсе тип белә якташтары уны, һәм яратып “Арғаяш һандуғасы” тип атайҙар.

Венера Сөнәғәт кыҙы менән мин һикһәненсе йылдарҙан танышмын. Педагогик хеҙмәт юлым Арғаяш районының Ҡуйһары мәктәбендә, уның менән бер кабинетта башланғайны. Туған тел һәм музыка укытыусылары булып бергә һыйынып татыу йәшәнек. Иңгә-иң терәп мәктәптә төрлө саралар уҙғарабыҙ, ауылдарҙа концерттар менән сығыш яһайбыҙ. Мин шиғырҙар укыйым, ә ул курай кеүек моңло тауышы менән якташтарын моңға сорнай ине.

Халык һөйөүен тойоп ул әленән-әле халык алдына сыкты. Уның эстрада йырҙарынан башланған репертуары халык ижады өлгөләре менән байый барҙы. “Мин Ҡуйһары концерваторияһын тамамланым”, — тип шаярта, якташтарынан “Арғаяш һандуғасы” тигән мактаулы исем алғас.

Ҡурай тартһаң көй була, тигәндәй, йырлай-йырлай халык күңелен нурлай торғас ул үҙенең музыкаль дискын туплай. 2009 йылда Өфөлә “Йырҙарым бар йырларға” тигән тәүге музыкаль альбомы сыкһа, 2012 йылда “Мөнәжәттәр” тип исемләнгән икенсе дискаһы менән якташтарын һөйөндөрә. Уның был музыкаль дискалары туған тел укытыусылары өсөн тыуған якты өйрәнеүҙә әһәмиәтле сығанак булды.

Уның сауаплы эштәре йәнә шунда: ул якташтарынан байтак мөнәжәттәр яҙып ала. Арғаяш башкорттары халык рухын өмөт-ышаныс менән һуғарыусы дини жанрҙы айырыуса кәҙерләп һаклай. Венера Сөнәғәт кыҙы шуларҙы сәсәниә булып ихлас башкара. “Нәғимә Вәкилова, Бәһнән Якупова һ.б. инәйҙәрҙән мөнәжәттәр яҙып алдым. Аят укыған вакытта шуларҙы башкарһам, ауылдаштарҙың күңелдәре йомшарып, күҙҙәренә йәштәр килә...” — тип һөйләй мөнәжәттәрҙең арбау һәм сихри көсө хакында.

Быйыл апрель айында Акмулла әҙәби берекмәһенең 55 йыллығын билдәләгән көндәрҙә Өфөнән бер төркөм яҙыусылар килде. Силәбе калаһының Төҙөүселәр мәҙәниәт һарайында күркәм байрам сараһы булып уҙҙы. Силәбе сәфәренән кайткас шағирә Лариса Абдуллина: “Венера Шәймөхәмәтова сығышы менән Өфөләге академик йырҙарҙан арындырып, халкыбыҙ моңдарына сорнаны. Бына, исмаһам, кеше йырлай: интектермәй ул йырҙы, моң эсенән ағыла ла ағыла”, — тип, һокланып, бик хаклы яҙып сыккайны.




Венера Шәймөхәмәтова “Ирәндек моңдары”, “Оҙон көй” халык йырҙарын башкарыусылар конкурстары лауреаты. Ул байтак наградалар менән бүләкләнгән. Халкыбыҙҙың оло хөрмәткә лайыклы кыҙын юбилейы менән ихлас котлайбыҙ!

**Ҡамса МОРТАЗИН,**
**филология фәндәре кандидаты.**

***Кәҙерле әсәйебеҙ Венера Сөнәғәт кыҙы ШӘЙМӨХӘМӘТОВАНЫ 70 йәшлек юбилейы менән ысын күңелдән котлайбыҙ һәм йөрәк түренән сыккан иң изге теләктәребеҙҙе еткерәбеҙ!***

Әсәй, донъялағы бөтә якшылыктарҙы йыйған оло йөрәгең, беҙгә карата булған оло хәстәрлегең, фәһемле кәңәштәрең, ярҙамың өсөн һинең алдыңда башыбыҙҙы эйеп, сикһеҙ рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Һин булғанға донъябыҙ йәмле, йәнле, һинең фатихаң менән аҙымдарыбыҙ ышаныслы, бәхетебеҙ тулы, уйҙарыбыҙ якты.

Хоҙай һине сәләмәтлектән, бәхеттән, күңел тыныслығынан айырмаһын. Фани донъяның рәхәтлектәрен күреп, һаулыкка туйынып, шатлык-кыуаныстарға төрөнөп, киләсәктә лә якындарыңдың күңел йылыһын тойоп, балаларыңдың изгелектәрен күреп, уларға терәк, кәңәшсе булып, оҙон, бәхетле ғүмер итеүеңде теләйбеҙ.

*Ҡотло булһын, әсәй, юбилейың,*
*Матур атһын килер таңдарың.*
*Рәхәт йәшә, изгелеге кайтһын*
*Һин үҫтергән балаларыңдың.*
*Ҡояш йылыһына йыйылғандай,*
*Һыйынабыҙ, әсәй, яныңа,*
*Тормош йәмен, матурлығын тойоп,*
*Йәшә, әсәй, йәшә тағы ла.*



**Иң изге теләктәр менән балаларың, ейән-ейәнсәрҙәрең, туғандарың, ауылдаштарың.**